*Өлфәт ҠОБАҒОШОВ*

# ТАЙМАҪ ВОЛОСЫ

Башҡортостанда волостар борондан этник йәһәттән төҙөлгән булған һәм 1798 йыл кантон идаралығы индерелгәс тә был традиция иҫәпкә алынған. Башҡорт ғәскәрҙәрендәге 1855 йылғы реформанан һуң был традиция боҙола. Һөҙөмтәлә ҡатнаш волостар барлыҡҡа килә.

Быны Таймаҫ ауылының тарихында күреп була. Мәҫәлән, Таймаҫ Ырымбур губернаһы һәм өйәҙенең 9-сы башҡорт кантонындағы 2-се бүлектең 13-сө класлы кантон башлығы ярҙамсыһы, йорт старшинаһы Буранбай Бураҡаев командаһына ҡараған. 1816 йылғы ревизия мәғлүмәтендәге 2-се һанлы теҙмә буйынса түбәндәге ауылдар уға инә:

61. Мотал — 144;
62. Түкән — 61;
63. Таймаҫ — 165;
64. Юлдаш — 205;
65. Ялсыҡай — 112;
66. Яңы Бесәнсе — 14;
67. Теш таҙартыу станцияһы (Зубочистинская станица) — 36 ир кеше.

Барлығы 637 йән ир кеше теркәлгән. (Башҡортостан Республикаһы Үҙәк дәүләт тарих архивы (артабан БР ҮДТА). Ф.И.-138. Д.146. Оп. 2).

Ялан Бөрйән ырыуы шәжәрәһе буйынса был ваҡытта Юлдаш ауылы кешеләре Стәрлебаш янындағы Төрөшлө йылғаһы буйында Бөрйән Юлдашы тигән исем менән йөрөгән ауылда йәшәйҙәр. Һайылмыштың һул ҡушылдығы булған Тиләгәҙе йылғаһы буйына улар 1822-23 йылда ғына күсеп ултырып, Үрге Юлдаш, Урта Юлдаш, Түбәнге Юлдаш исемле өс ауылды нигеҙләйҙәр. (Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар системаһы. — Өфө, 1980. — 116-117-се биттәр. Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 2-3. — Уфа: Китап, 1998. — 166-169- сы биттәр).

Юлдаш ауылы был ауылдарҙан 70-80 саҡрым алыҫлыҡта урынлашыуына ҡарамаҫтан, юғарылағы теҙмәнән күренеүенсә, үҙ ырыуҙаштары волосы ерендәге командаға ҡараған, сөнки был ауылдар Бөрйән волосының «айырым биләмәһе»* ерҙәрендә урынлашҡан булған.

Һайылмыштың һул ҡушылдығы булған Яланға йылғаһында урынлашҡан Ялсыҡай ауылы (112 ир кеше йәшәгән) 1823 йылдың 20 апреленән алып старшина Буран Султаҡаев командаһына ҡарай башлай. Ул йәшәгән Яҡут ауылы Һайылмыштың үрге ағымында урынлашҡан була һәм 1828 йылда Бөрйән волосы үҙәгенә әүерелә. Тиҙҙән, аҫаба ерҙәре киҫелеп ҡаҙнаға күсеү сәбәпле, 1854 йылдан Яҡут Оло Юшатырҙың Ҡаҙлайыр тамағына, Ялсыҡай әле ултырған урынына — Таймаҫтарҙың йәйләү ере — Һөлөклө йылғаһының Үләкән һаҙы тамағына күсә башлай. (БР ҮДТА Ф.И-2. Оп.1. Д.4844). Ялсыҡай ауылы кешеләре ниндәйҙер сәбәп менән 1878 йылда ғына күсеп ултырған, уларҙың бер өлөшө элекке урынында тороп ҡалған һәм Иҫке Ялсыҡай тип йөрөтөлгән. Бөрйән волосы Ҡарай ауылының Һайыл-

---

*Бөрйән волосының «айырым биләмәһе» тураһында мәғлүмәт «Ватандаш» журналының 1999 йылғы 12-се һанында Ө.Ҡобағошовтың «Көйөргәҙе буйы киртләс-киртләс» исемле мәҡәләһендә бирелгән.



10-2001.p65 14 30.10.01, 14:40




мыш буйындағы утары иҫәпләнгән Аҡбулат (Ҡарай) кешеләре лә төп ауылына 1854 йылда күсеп килә. 1852 йылда Үрге Юлдаштан Таймаҫҡа 151 кеше күсеп ултыра. Түбәнге Юлдаш Үрге Юлдашҡа күсеп килә, XX быуат башында Урта Юлдаш та Үрге Юлдашҡа күсеп бөтә. (Д.704. Д.4844). Күсеүҙәр бер нисә тиҫтә йылдарға һуҙыла. Һөҙөмтәлә был төбәктә демографик хәл ныҡ үҙгәрә.

1834 йылғы ревизия буйынса Яҡут ауылында 586 кеше йәшәй. Ә 1859 йылғы X ревизия буйынса Яңы Яҡутта — 841 кеше, Иҫке Яҡутта (бер өлөшө Һайылмыш буйынан күсеп бөтмәгән була әле) — 255 кеше — барлығы 1096 кеше теркәлгән. (Д.704).

Шулай итеп, Яҡут Башҡортостандың көньяғындағы иң ҙур башҡорт ауылдарының береһе була.

Ә хәҙер Таймаҫ ауылының халыҡ һанының үҫешенә күҙ һалайыҡ.

Таймаҫта 1795 йылда 21 йорт булып, унда 160 ир кеше теркәлгән. (Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 1. Уфа: Китап, 1997. С.207). 1811 йылда бында 25 хужалыҡта 152 ир, 1816 йылғы VII ревизия буйынса 25 хужалыҡта 165 ир һәм 136 ҡатын йәшәгән. (Д.146). Ревизия мәғлүмәттәренән күренеүенсә, 1812 йылғы Ватан һуғышында 10 кеше һәләк булған. Ошо аралыҡта 65 һәм 80 йәштә ике ир кеше, 9 йәштәге бер ир бала донъя ҡуйған. 1834 йылда 50 хужалыҡта 189 ир һәм 176 ҡатынҡыҙ теркәлгән.

Был осорҙа Таймаҫ 9-сы башҡорт кантонының 31-се һанлы йортона ҡарап, старшина Бикмөхәмәт Биккузин етәкселегендәге командала була. Командаға тағы Мотал, Түкән, Бесәнсе, Юлдаш ауылдары ингән. Бында барлығы 749 ир һәм 742 ҡатын теркәлгән. Таймаҫта шул ваҡытта старшина Бикмөхәмәт Биккузиндың бер туған энеһе урәтник Мөхәмәтсәлих Биккузин, зауряд-есаул Ғүмәр Ҡалҡаманов, зауряд-есаул Ишморат Ҡускилдин, указлы мулла Вәлит Ҡынбаев, аҙансы Йомағужа Бәхтәриев, зауряд-хорунжий Ғәбил Үтәгәновтар хеҙмәт итә. Ауыл бөрйән ырыуы Байһары һәм Йәнһары түбәһе аҫаба башҡорттарынан тора. Бына уларҙың ҡайһы бер ырыу тамғалары:



(БР ҮДТА Ф.И.-138. Д.430. Оп.2).

1852 йылда Юлдаштан ырыуҙаштары күсеү сәбәпле, Таймаҫ тағы ла ҙурайып, 1859 йылда унда 720 кеше иҫәпләнә (Д.704).

Оло Көйөргәҙе буйында, Таймаҫ ауылынан түбәндәрәк 1-се Кинйәабыҙ менән Түкән ауылдары араһында Яңы Бесәнсе ауылы урынлашҡан була. Ғәҙәттә был ауылды



10-2001.p65 15 30.10.01, 14:40

Күгәрсен районының Бесәнсе (Хоҙайбирҙе) ауылы менән бутайҙар. Беҙҙең Бесәнсе ауылында 1763 йылда билдәле башҡорт шағиры Мәнди Ҡотош Ҡыпсаҡи тыуған. Ауылдың исеме шағирҙың бер туған ағаһы Бесәнсе Ҡотошов (1755 йылғы) исеменән алынған. 1816 йылғы ревизия буйынса бында 2 ғаиләлә 14 ир һәм 12 ҡатын йәшәгән. Беренсе ғаиләлә Бесәнсе Ҡотошов ике ҡатыны менән, Абдулхалик тигән улы ҡатыны, ике ҡыҙы һәм ҡустыһы Мәнди Ҡотошов өс улы һәм ике ҡыҙы менән торған. Икенсе хужалыҡта Файзулла Түлгәновтың ун бер кешенән торған ғаиләһе йәшәгән. Был ауыл 68-се һанлы теҙмә менән теркәлеп, 9-сы башҡорт кантонының 2-се бүлегендәге 13-сө класлы кантон ярҙамсыһы старшина Буранбай Бураҡаев командаһына ҡараған. (БР ҮДТА. Ф. И-138. Оп.2. Д.146). Ә 1834 йылда бында дүрт хужалыҡта 17 ир һәм 20 ҡатын теркәлеп, улар шул уҡ Бикмөхәмәт Бикузин командаһына ҡараған (Д.430). 1859 йылда Бесәнселә 24 ир һәм 22 ҡатын йәшәгән (Д.704). 1873 йылғы Түкән ауылының планында Түкән ауылы айырым ултырған ауыл булып күренә. (БР ҮДТА. Ф.351. Оп.1. Д.16395). Ә 1906 йылғы Түкән, Бесәнсе һәм Ҡайыпҡол ауылдары планында был өс ауыл Түкән ауылы ултырған урында күрһәтелгән (Д.16394). Тимәк ошо аралыҡта Бесәнсе ауылы кешеләре 4-5 саҡрым алыҫлыҡта ғына урынлашҡан Түкәнгә күсеп килгән. Мәнди Ҡотош 86 йәшендә 1849 йылда вафат була. Ул 1-се Кинйәабыҙ ауылы зыяратында ерләнгән. Уның ҡәберен урындағы кешеләр әлеге ваҡытта Әүлиә зыяраты тип йөрөтәләр.

Күгәрсен районы Бесәнсе (Хоҙайбирҙе) ауылына килгәндә, ул икенсе бер Бесәнсе тигән кеше исеменән алынған. Уның 1738 йылғы Арыҫланғол, 1747 йылғы Хоҙайғол, 1749 йылғы Хоҙайбирҙе тигән өс улы була һәм уның Бесәнсе Ҡотошов менән бер ниндәй туғанлығы, уртаҡлығы юҡ. Тарихсы Әнүәр ағай Әсфәндиәров та был Яңы Бесәнсе ауылын Керәүле йылғаһы буйына урынлаштырған. (Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 2-3. Уфа: Китап, 1998. С.196-197). Бәлки унда Бесәнсе (Хоҙайбирҙе) ауылынан айырылып сыҡҡан тағы ла бер Яңы Бесәнсе тигән ауыл булғандыр? Көйөргәҙе буйындағы ауыл урынын 1960-70 йылдарҙа ла оло кешеләр хәтерләй ине әле. Бесәнсе ауылы тураһында һүҙ сыҡһа: «Ҡайһы Бесәнсе? Иҙел буйы Бесәнсеһеме? Был Бесәнсеме?» — тип асыҡлайҙар. Аҙаҡ шуны әйтергә кәрәк: был ауылдарҙың бер үк командаға ҡарауы һәм шағирҙың был ауылдан 3-4 саҡрым эргәлә генә урынлашҡан 1-се Кинйәабыҙ ауылы зыяратында ерләнеүе был шиктәрҙе алып ташлай. Ә Бесәнсе (Хоҙайбирҙе) ауылы 1-се Кинйәабыҙҙан 40-50 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Минеңсә, Яңы Бесәнсе, Ҡайыпҡол Кинйә йәки Түкән ауылының утарҙары булырға тейеш. Сөнки был ауылдар барыһы ла шул уҡ Ҡараҡыпсаҡ волосынан. Был турала 9-сы башҡорт кантоны башлығы, ғәскәр старшинаһы Ҡыуатовтың 1841 йылдың 9 апрелендә яҙған рапортында ла, ер менән бәйле башҡа документтарҙа ла асыҡтан-асыҡ әйтелә. (БР ҮДТА. Ф.И-2. Д.4839. Оп.1).

Таймаҫ волосына ҡараған Зәк-Ишмәт ауылы тураһында мәғлүмәт бирәйек.

Таймаҫ ауылы аҫаба башҡорттары ла ерҙе күскенселәрҙән һаҡлау өсөн, утар-утар булып төрлө ваҡыттарҙа бер нисә урынға (әлегә алтауһы билдәле) таралып ултыралар. Таймаҫтарҙың бер утары Иҙәк һыуы буйында булып, исеме лә Иҙәк (Изяково, Зяково) тип йөрөтөлгән. Ул төп ауылдан 10 саҡрым алыҫлыҡта ултырған. Был утарҙа IV ревизия буйынса 1784 йылда Таймаҫ ауылынан сыҡҡан ике башҡорт хужалығы теркәлгән. (Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн.1. Уфа: Китап, 1997. С.212). Шуны әйтеп китергә кәрәк. Был утарҙа 1822 йылда XIX быуаттың күренекле башҡорт шағиры Шәмсетдин Зәки тыуған. 1835 йыл Таймаҫ ауылы аҫабалары Ҡарғалы сауҙагәр татарҙарына яһаҡ түләү шарты менән 12 йылға ошо Иҙәк (Зәк) утарына урынлашырға ризалыҡ бирәләр. (БР ҮДТА. Ф.И-2.



10-2001.p65 16 30.10.01, 14:40

Д.4843. Оп.1). Шул осорҙан алып ауыл Иҙәк-Ишмәт (Зяк-Ишметово) тип йөрөтөлә башлай.

Административ берәмектәр 1855 йылғы реформанан һуң территориаль йәһәттән бүленһә лә 1859 йылғы ревизияла Бөрйән йорт йәмғиәте теҙмәһендә (ул 11 ауыл йәмғиәттәрен үҙ эсенә ала) уларҙың ырыу принциптарынан сығып төҙөлөүен асыҡ күреп була.

1863 йыл 14 май һәм 1865 йыл 2 июль ҡарарҙарына ярашлы Башҡортостанда кантон идаралығы бөтөрөлә лә башҡорттар граждандар хәленә күсә һәм уларҙың үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуҡтары һаҡланып ҡала. Шуның менән бәйле 1864 йылдан яңы волостар, ауыл йәмғиәттәре барлыҡҡа килә. Был бүленештә лә Бөрйән волосы ерендә шул уҡ ауыл йәмғиәттәре һаҡлана. Айырма тик шунда: Ҡалта үҙе бер ауыл йәмғиәтенә әйләнеп, Иҫке Яҡут ауылы йәмғиәте бөтөрөлә. 1864 йылда Бөрйән волосы (үҙәге Яҡут ауылы) урынына Таймаҫ волосы төҙөлә. Тәүҙә уға юғарыла әйтелгән ерҙәрҙәге барса ауылдар ҙа ҡарай. Бер аҙ ваҡыттан Яҡуп ауылында бер волость төҙөлөп, уға бер генә бөрйән ауылдары ҡарамаһа ла, барыбер Бөрйән волосы тип йөрөтөлә. Тағы ла Бөрйән волосының «айырым биләмәһе» ерҙәрендә Ҡурғаҙы волосы — үҙәге Ҡурғаҙы (Ермолаево) ауылы, Мораптал волосы — үҙәге Мораптал ауылы барлыҡҡа килә. Бына ошо дүрт волость Бөрйән волосының «Айырым биләмәһе» ерҙәре сиктәрендә барлыҡҡа килә һәм Көйөргәҙе районы төҙөлгәндә нигеҙ итеп алына.

Шул ваҡытта волость үҙәктәре төҙөкләндерелә: урамдарға таш юлдар йәйелә, эргә яҡлап таштан буралған канауҙар ҡаҙыла, кирбес-таштарҙан күперҙәр һалына. Таймаҫ волосы идараһы бинаһы бик күркәм паркет иҙәндәр йәйелеп, сығырлы шәмдәлдәр эленеп, ҙур итеп һалынған булған. Унын 500-ләп кеше һыйҙырышлы актовый залы, бик күп бүлмәләре, тотҡондар өсөн зинданы, эргәһендә ям станцияһы, мөгәзәйҙәр эшләгән, унлап полицейский хеҙмәт иткән. Был биналар, ауыл байҙарының йорттары, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, революциянан һуң, 1930-36 йылдарҙа район үҙәгенә, Мораптал совхозы төҙөлгәндә тырым-тыраҡай таратылып, юҡҡа сығып бөткән.

Ошо административ бүленеш бер аҙ үҙгәрештәр менән 1927 йылға саҡлы һаҡлана. 1870 йылдан алып Таймаҫ волосының башында старшина булып Ураҙбаев (Үрге Мотал), үрәтник Ҡорбанғәли Ҡыҙрасов, унын улы үрәтник Ғайнулла Ҡыҙрасовтар (Юлдаш), Таймаҫ ауыл йәмғиәте башлығы булып Суфьян Мәксүтов (Таймаҫ) хеҙмәт итәләр.

Бөрйән волосы башҡорттары яңы административ бүленештә лә үҙ ырыуҙаштары менән бер волосҡа инергә ынтылғандар һәм тәүге осорҙа барыһы ла Таймаҫ волосына ҡараған. Был турала 1985 йылда Аҡһары ауылы аҡһаҡалы Йосоп бабай Күсәрбаевтан да (1903 йылғы) ишеткәйнем: «Беҙҙең башта 80 өй ҡыпсаҡ, теге башта 40 өй бөрйән. Хатта Яҡуп волость булғас та, күсмәй Таймаҫта ҡалдылар. Яҡуттар ҙа шунда ҡараны».

1917 йылдың 29 ноябрендә Башҡортостан автономиялы республикаһы иғлан ителеү менән, милли хөкүмәт төҙөлгәс тә бөтөн Башҡортостан территорияһының идара органдарын һәм милли ғәскәрен төҙөү башлана. Башҡортостан 13 кантонға бүленеп, Таймаҫ, Бөрйән, Ҡурғаҙы, Мораптал волостары тағы бер нисә волость менән бергә Етерыу кантонына инә. 1919 йыл уға Ҡыпсаҡ кантоны ҡушыла һәм Ҡыпсаҡ-Етерыу тип йөрөтөлә башлай. Граждандар һуғышы осоронда Ырымбур губерна советының Ырымбур мосолман хәрби комитеты яңы барлыҡҡа килгән Башҡортостан хөкүмәтенә ҡаршы асыҡтан-асыҡ эш алып бара. 1918 йылдың 3 февралендә Башҡорт хөкүмәтен ҡулға ала. Шул Ырымбур мосолман хәрби комитетының рөхсәте менән 1917 йыл империалистик һуғыштан ҡайтҡан бер төркөм яугирҙар Фәхрислам Исмәғилев етәкселегендә Таймаҫ



10-2001.p65 17 30.10.01, 14:40

волосының революцион комитетын ойоштора. Таймаҫтан Заһиҙулла Яматов, Түкәндән Кинйәмырҙа Ҡаҙаҡбаев, Иҙәк-Ишмәттән Ғөбәйҙулла Хөсәйенов вәкиллегендә губерна съезына делегаттар ебәрелә. 1918 йылдың май баштарында Таймаҫ волосы һәм ауыл советтары төҙөү өсөн, Ырымбур мосолман хәрби комитеты вәкиле Сәлих Юлаев һәм уның менән бергә биш ҡыҙылармеец — Рәшитов Сәйфетдин (Яҡшымбәт), Абдулла Сурин (Яҡуп), Бикмөхәмәтов Ҡотдос (Абдул) килә. Ауылдарҙа советтар төҙөлөп бөткәс, Таймаҫ ауылында волость йыйыны (съезд) саҡырылып, унда һәр ауылдан 2-3-әр вәкил (депутат) ҡатнаша. Йыйын волость башҡарма комитетын (совет) һайлай:Рәйес — ҡыҙыл комиссар Исмәғилев Фәхрислам (Таймаҫ);

Рәйес урынбаҫары — Имаков Тайып (Ҡансыра);

Сәркәтип — Петров Николай (Васильевка);

Халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире — Вәлиәхмәт Мөхәммәтрәхимов;

Ер эштәре бүлеге мөдире — Ғәлиәкбәров Борһан;

Аҙыҡ-түлек бүлеге мөдире — Сәйфулла Хөсәйенов (Иҙәк-Ишмәт);

Финанс эштәре бүлеге мөдире — Ғәлиәкбәров Ғайса;

Социаль тәьминәт бүлеге мөдире — Яматов Сәлимгәрәй (Таймаҫ);

Хәрби комиссар — Уразбаев Фәхретдин (Үрге Мотал);

Милиция башлығы — Араптанов Заһиҙулла (Таймаҫ).

Таймаҫ ауыл советы рәйесе итеп Мәкстүтов Минеғужа һайлана.

Таймаҫ волосы советына түбәндәге ауылдар ингән:

Таймаҫ, Иҙәк-Ишмәт, Юлдаш (хәҙерге Федоровка районы), Иҫке Ялсыҡай (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Шарлыҡ районы), Краснолог утары, Андреевка, Түкән, Ҡарай, Васильевка, Үрге Мотал, Түбәнге Мотал, Аҡташ-Һарат, Ҡарамалы, Ҡансыра, Яңы Ялсыҡай, Урай утары. Был совет 1,5 ай самаһы йәшәй. Дутов яңынан көсәйә. Ҡыҙылдар Ырымбурҙы ташлап Аҡтүбә*, Ташлы аша Белорет яғына хәрәкәт итә. Тимер юлдары буйлап чехтар корпусы баш күтәрә. Ырымбур өйәҙендә иҫке власть ҡайтанан аяҡҡа баҫтырыла. 1918 йылдың июль баштарында башҡорт байы Ғайзулла Ҡыҙрасов (Юлдаш ауылы) 200-ләп һыбайлы отряд ярҙамында, был яҡ ауылдарҙағы совет етәкселәрен ҡулға алып, туҡмап, волость төрмәһендә бикләп тота, аҙаҡ Исмәғилев Фәхрислам, Араптанов Заһиҙулла, Петров Николай, Мөхәмәтйәнов Мостафа кеүек етәкселәрҙе Дедово-Исаево (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Октябрьский ҡасабаһы) ауылында язалап, атып үлтерәләр. 1959 йылда Октябрьский ҡасабаһындағы был урындағы туғандар ҡәберлегенә обелиск ҡуйылған.

Шулай итеп, 1918 йыл ғинуар айында ойошторолған Ҡурғаҙы, мартта ойошҡан Бөрйән волость советы һәм 12 июндә төҙөлгән Мораптал волость советтары ла июль баштарында йәшәүҙән туҡтай.

1918 йылдың 3-4 апрелендә азат ителгән Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре ныҡышмалы рәүештә үҙенең власть органдарын көсәйтә, ғәскәри берәмектәр булдырыуҙы дауам итә. З.Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт ғәскәре штабы 1918 йыл декабрҙең тәүге яртыһында Ҡурғаҙыла (Ермолаево) немец помещигы Шотт имениеһында урынлаша. Әлбиттә, был осорҙа яҡын-тирәләге волостарҙың Башҡорт хөкүмәтенә ҡарағанлығына һәм был ауылдарҙан яңы көстәрҙең Башҡорт ғәскәрҙәренә ағылғанлығына бер кемдең дә шиге булмаҫ.

1918—19 йыл ҡыш һәм яҙ Ҡыҙыл ғәскәрҙең Быҙаулыҡ — Ырымбур, Боғорослан — Стәрлетамаҡ йүнәлешендәге көстәре, тап ошо волостар аша хәрәкәт итеп, урындағы халыҡты ныҡ йонсота, ҡыра.

Йәш Башҡортостан милли автономияһына «буржуаз милләтселәр», тип, нәфрәт менән ҡараған ҡыҙылдар башҡорт ауылдарында айырыуса баш-баштаҡлыҡ итә. Мәҫәлән, Таймаҫ ауылында ғына ла тиҫтәләгән ғәйепһеҙ кеше атыла. Бар уҡымышлы кешеләр: Исхаҡ мулла,

---

* Һайылмыш тамағындағы боронғо ҡасаба.



10-2001.p65 18 30.10.01, 14:40

унының улы Шәкир мулла, унының улы Әксән Ишморатовтар, Ғабдрахман мулла Ҡобағошов һәм башҡалар язалап үлтерелә. Халыҡта ат, мал, әйбер ҡалмай, талап алына.

Старшина Ғайзулла Ҡыҙрасов, был яҡ ауылдарҙағы байтаҡ кешеләр 14 ылау менән, тағы уларға ҡушылған башҡа ҡасаҡтар, Урта Азияға, унан Ҡытайға ҡаса.

Улар унда Синьцзян-Уйғыр автономиялы районында айырым бер нисә ауыл булып урынлашалар. Ҡыҙрасовтың улдары уҡып, шунда белем алып, төрлө яуаплы урындарҙа эшләйҙәр. Бер улы ҙур заводтың директоры вазифаһын башҡара. Был турала 1963 йылдарҙа Таймаҫҡа — тыуған илен, ауылын күрергә ҡайтҡан «ҡытай» инәйе һөйләгәйне.

1919 йыл аҙаҡтары — 1920 йыл баштарында волостарҙа ярлылар комитеты (комбед) барлыҡҡа килә. Таймаҫ волость комбеды рәйесе итеп Сәлимгәрәй Яматов, сәркәтибе итеп Абдулла Ишмөхәмәтов һайлана. Был комитеттарҙың, әлбиттә, Башҡортостан хөкүмәтенә ҡаршы төҙөлгәнлеген һәм ниндәй «эш» алып барғанлығын хәҙер беләбеҙ инде.

1920 йылда Таймаҫта 218 хужалыҡта 1000-дән артыҡ кеше йәшәй. (БР ҮДТА. Ф.Р.- 472. Д.805. Оп.1). Бер хужалыҡтағы айырым йорттарҙа бер нисә ғаилә йәшәгәнлектән асылда иһә йорттар һаны 250-нән ашып китә. Ауылда ике мәсет, ике мәҙрәсә эшләй, өсөнсө мәсет һалдырыуға иғәнәгә аҡса туплана.

1919 йылда Таймаҫта волость үҙәген бөтөрөп, уны Ҡурғаҙыға (Ермолаевоға) күсерергә тырышалар. Был көстәр күсереүҙе Ҡурғаҙының тракт буйында урынлашыуы менән аңлатырға тырышһалар ҙа, ысынбарлыҡта башҡорт ауылдарының үҙәкҡә әйләнеп китеүенән ҡурҡалар. Имаков Тайып, Әлмөхәмәтов Алтынғужа һәм башҡалар юллап, үҙәкте һаҡлап алып ҡалалар. 1920 йылда Ермолаевола 186 йортта 989 кеше йәшәгән. (Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн.1. Уфа: Китап, — 1997. С. 217). Күреүебеҙсә, йорттар һәм халыҡ һаны буйынса ул Таймаҫтан ҡалыша.

Граждандар һуғышы тынып та өлгөрмәй, 1921 йыл ҡот осҡос афәт килтерә. 1922 йыл 10% ауыл хужалығы иҫәбен алыу Таймаҫ волосында ла үткәрелә. Бынан күренеүенсә, аслыҡтан, ваба рәнйеүенән Таймаҫта ғына ла 509 кеше ҡырыла. (БР ҮДТА Ф.Р-472. Д.973. Оп.1).

1917 йылда Таймаҫ волосында 6777 кеше йәшәй һәм 15510 баш мал иҫәпкә инә. (БР ҮДТА. Ф.Р.- 472. Д.1296. Т.1. Оп.1.). Ә Таймаҫ ауылында 3 мең баштан артыҡ мал була. 1920 йылда Таймаҫта 985 баш мал тороп ҡала. Ә инде 1922 йылда барлығы 126 хужалыҡта 457 кеше, 220 баш мал иҫән ҡалған, 92 йорт бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан! Волость буйынса 1922 йылда 4188 кеше, 3018 баш мал иҫән ҡалған (Д.973). Шуны әйтеп китергә кәрәк, аслыҡтан айырыуса башҡорттар ныҡ ҡырылған. Урыҫтар, украиндар йәшәгән ауылдарҙа, киреһенсә, үҫеш күҙәтелә. Мәҫәлән, Андреевкала 1920-22 йылдар араһында 42 йорттан 46-ға етеп, 6 кеше үлгән, 11 кеше тыуған, халыҡ һаны 5 кешегә арта, һәм бөтәһе 320-гә еткән, 1922 йылда унда 634 баш мал булған. Саратовский утарында 2 кеше үлгән, 4 кеше тыуған, Урай утарында ла 4 кеше үлгән, 7 кеше тыуған һ.б. (Д. 973). Был хәлде әлегә аңлауы ҡыйын, сөнки иҫәп алыу материалдарынан күренеүенсә, халыҡтың иҡтисади хәле (малдар һаны, сәселгән ер һ.б.) бер сама булған бит, башҡорт ауылдарында ла, башҡа ауылдарҙа ла.

Был ауыр йылдарҙа волость башҡарма комитеты рәйесе булып Әлмөхәмәтов Алтынғужа (Таймаҫ) һәм Ҡыуандыҡов Әхмәтсафа (Таймаҫ) эшләйҙәр. Таймаҫ волость үҙәге булыуҙан туҡтамай. 1922 йылдың 20 ноябрендә III Йылайыр кантоны съезына Таймаҫ волосынан ике делегат ебәрелә. Шул ваҡыттан алып Ҡыпсаҡ-Етерыу кантоны волостары эреләтелгән Йылайыр кантонына ҡарай башлайҙар. (БР ҮДТА. Ф. Р-834. Д.10. Оп.2).



10-2001.p65 19 30.10.01, 14:40